***Ғиниәт ҠУНАФИН,***
***филология фәндәре докторы,***
***профессор***

# Ғилми гәүһәрҙәр ҡалдырҙы



*Ким Әхмәтйәнов*

XX быуаттың 60—70-се йылдары башҡорт әҙәбиәте һәм әҙәбиәт ғилеме тарихында бер сағыу һынылыш һәм үҫеш осоро булды: һүҙ сәнғәтебеҙҙең совет осорондағы үҫеш тарихы хаҡында фундаменталь хеҙмәт тыуҙы, күренекле әҙиптәребеҙҙең тормошо һәм ижады тураһында төплө монографиялар яҙылды, XVIII—XIX быуаттарҙағы әҙәби мираҫыбыҙға бәйле етди күҙәтеүҙәрҙе туплаған, шул осорҙағы әҙәби процесты билдәле бер системаға һалып яктыртырға ынтылған мөһим хеҙмәт барлыҡҡа килде. Был осорға — беҙ яңы ғына тарихҡа оҙатып ебәргән XX быуаттың 50-се йылдары аҙағы — 60-сы йылдар башына — һүҙ сәнғәтен өйрәнеүсе фән майҙанына көслө тулҡын булып Ғайса Хөсәйенов, Нур Зарипов, Әнүр Вахитов, Суфиян Сафуанов, Мөхтәр Сәғитов, Марат Минһажетдинов, Фәнүзә Нәҙершина, Салауат Галиндар килгәйне. Күп тә үтмәй уларға Рауил Бикбаев, Әхмәт Сөләймәнов, Роберт Байымов, Вафа Әхмәҙиев, Тимерғәле Килмөхәмәтов килеп ҡушылды. Улар Әхнәф Харисов, Кирәй Мәргән (Әхнәф Кирәев) кеүек күренекле ғалимдарҙың сафын тулыландырып, сәмләнеп, ярышып, янып-дәртләнеп әҙәбиәт ғилеме һәм фольклористика офоҡтарын бермә-бер киңәйтте, ғилми-теоретик «көмбәҙ»ҙе бермә-бер бейегәйтте һәм ысын мәғәнәһендә ижади шәхескә әүерелде. Бөгөн был фән эшмәкәрҙәренең исем-шәрифтәре лә, хеҙмәт емештәре лә күптәргә таныш, яҡын һәм ҡәҙерле. Әйтәйек, улар яҙған хеҙмәттәр хәҙерге ваҡытта мәктәптәрҙә, юғары уҡыу йорттарында «тормош дәреслеге», универсаль белем һәм тәрбиә биреү сығанағы булған һүҙ сәнғәтен теоретик һәм тарихи планда өйрәнеүҙә төп ерлек ролен үтәй. Ҡыҙғаныстҡа ҡаршы, фән, әҙәби ижад донъяһына көслө ағым булып килеп ингән был быуын эшмәкәрҙәре араһында Марат Минһажетдинов, Әнүр Вахитов, Мөхтәр Сәғитов, Нур Зарипов, Вафа Әхмәҙиев, Ким Әхмәтйәновтар юҡ инде.

Яңынан-яңы идеялар күтәреп, янып-ярһып, илһамланып эшләп йөрөгән, докторлыҡ диссертацияларын яҡларға өлгөрөп еткән саҡтарында, «бәйгеләрҙә сапҡан ат һымаҡ» ауҙы, аҡ ҡағыҙ битттәренә төшөрөп өлгөрмәгән уй-фекерҙәрен үҙҙәре менән мәңгелеккә алып китте улар.

Был мәҡәләлә XX быуаттың 60—70-се йылдарында башҡорт әҙәбиәт ғилеменең фундаменталь хеҙмәттәр тыуҙырыу юғарылығына күтәрелгән

фән өлкәһенә әүерелеүенә, айырыуса әҙәбиәт теорияһының үҫешенә ифрат ҙур өлөш индергән арҙаҡлы ғалимыбыҙ Ким Әбүзәр улы Әхмәтйәнов тураһында һүҙ алып бармаҡсыбыҙ. Ул, Рәми Ғарипов, Рафаэль Сафин, Әнүр Вахитов кеүек, 1932 йылда яҡты донъяға килгән, унан яныпярһып ижад итә-итә иртә киткән арҙаҡлы ижади быуын вәкиле.

Арабыҙҙан киткәндә Ким Әхмәтйәновҡа 49 йәш кенә ине. Әммә кеше ғүмеренең мәғәнәһе йәшәгән йылдар күплеге менән түгел, бәлки башҡарған эштәренең тослоғо һәм әһәмиәтлелеге менән билдәләнә.

Ким Әбүзәр улының ошондай эштәр башҡарыуға табан юлы Башҡортостандың хозур тәбиғәтле Әбйәлил яҡтарынан башлана. Ул 1932 йылдың 5 февралендә Әбйәлил районының Оло Ҡыҙыл йылғаһы буйына һыйынып ҡына ултырған Ҡолбаҡты (хәҙерге Әлмөхәмәт) ауылында крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. Ғаиләлә берҙән-бер бала булып, бәләкәйҙән белемгә ынтылып үҫә Ким. 1947 йылда, һуғыштан һуңғы ауыр осорҙа, Әлмөхәмәт ете йыллыҡ мәктәбен тамамлағандан һуң, ул бер нисә синыфташы менән, яурынына тоҡсай аҫып, яҡты киләсәккә өмөтләнеп, уҡытыусы булам, тигән оло маҡсаттар менән Ирәндек тауҙары аша йәйәүләп Темәс педагогия училищеһына юллана. Мәктәпте тик «5» билдәһенә генә тамамлаған Кимде училищеға имтиханһыҙ ҡабул итәләр. Каникулдарға ҡайтҡан ваҡыттарҙа, Кимдең атаһы Әбүзәр ауыл советы рәйесе булып эшләһә лә, башҡа түрәләр кеүек бер ваҡытта ла малайын пар ат ектереп ҡаршыламай. Темәс педагогия училищеһында бергә уҡыған ауылдаштары хәтерләүенсә, Ким улар менән бергә дүрт йыл буйы Ирәндек аша йәйәүләп йөрөп уҡый, үҙен бик тыныс, әҙәпле, сабыр, түҙемле, ярҙамсыл итеп күрһәтә. Шулай ҙа атаһының үтә ҡырыҫ, үҙһүҙле булып ҡыланыуына эстән генә борсола, иптәштәре алдында уңайһыҙлана ул. Әбүзәр ағай, ысынлап та, ал бирмәҫ, ауыр холоҡло кеше булһа, Кимдең әсәһе Йәмилә апай үтә лә алсаҡ, мөләйем, асыҡ йөҙлө ҡатын була. Ким әсәһенең бөтә матур сифаттарын үҙенә туплай: тыйнаҡ, әҙәпле, тыныс холоҡло, тапҡыр телле кеше булып формалаша.

Темәс педагогия училищеһын да Ким тик яҡшы билдәләргә тамамлай, артабан Башҡорт педагогия институтына уҡырға инә. Уны, ҡыҙыл дипломға тамамлаған йәш белгесте, аспирантураға тәҡдим итәләр. Ана шул рәүешле белем юлының бөтә баҫҡыстарын үтеп, фән донъяһына аяҡ баҫа Ким Әбүзәр улы. Унда бары ике тиҫтә йыл самаһы ғына эшләүенә ҡарамаҫтан, ул күп һәм тәрән мәғәнәле ғилми хеҙмәттәр ҡалдырырға өлгөрә. Улар, һис һүҙһеҙ, ғалимдың ваҡыт ҡәҙерен белеп, көнө-төнө баш баҫып, ең һыҙғанып эшләүе һәм, әлбиттә, тәбиғәттән килгән таланты һөҙөмтәһе. Уның тырышлығына, фәнни ҡыйыулығына, оригиналь фекер йөрөтөүенә, яҙыу стиленең һығылмалылығына, логик һәм образлы фекерләү алымдарын оҫта ҡуша белеү ҡеүәһенә хайран ҡалырлыҡ. Фән донъяһына юл алыуының беренсе көндәренән үк йәш ғалимдың төп иғтибарын әҙәбиәт теорияһы һәм поэтика мәсьәләләренә йүнәлтеүе үҙе үк күп нәмә хаҡында һөйләй. Уның кандидатлыҡ диссертацияһы ла поэзияның иң «олпат» жанры — поэма теорияһына арналғайны. Был хеҙмәт 1962 йылда «Башҡорт поэмаларының компо-

зиция мәсьәләләре» тигән баш аҫтында айырым китап рәүешендә донъя күргәс, ҙур популярлыҡ ҡаҙанды, Мәскәүҙәге үҙәк матбуғат биттәрендә лә юғары баһа алды. Ысынлап та, йәш ғалим башҡорт поэмалары миҫалында әҙәбиәттә быға тиклем бөтөнләй тип әйтерлек тикшерелмәгән һүҙ сәнғәте әҫәрҙәренең, нескә поэтик «организмын», художество үҙенсәлектәрен, состав элементтарын, милли һыҙаттарын ышандырырлыҡ итеп күҙаллауға өлгәшә. Аныҡ итеп әйткәндә, ул тәү тапҡыр теоретик планда башҡорт поэмаларында фольклор поэтикаһының урыны, эпик һәм лирик башланғыс, лирик герой, новеллизм, художество детале һәм уларҙың сюжет, композиция ҡоролошондағы ролдәре, сюжеттан тыш күренештәр кеүек мәсьәләләрҙе күтәрә һәм уларҙы бай фактик материалдар ерлегендә төплө яҡтырта.

Тәүге уңыштарҙан ҡанатланған ғалим артабан милли әҙәбиәтебеҙ материалдары нигеҙендә әҙәбиәт ғилеменең иң төп, ҡатмарлы тармаҡтарының береһе булған әҙәбиәт теорияһының бөтә аспекттарын системалы яҡтыртыу эшенә ең һыҙғанып тотона, һөҙөмтәлә уның бер-бер артлы «Әҙәбиәт ғилеме һүҙлеге» (1965), «Шиғриәт иленә сәйәхәт» (1967) һәм шул осорҙағы ғилми эҙләнеүҙәренең «аккорды» булған «Әҙәбиәт теорияһы» (1971) тигән хеҙмәттәре донъя күрә. Был хеҙмәттәр, бигерәк тә тәүгеһе һәм һуңғыһы, тиҙ арала студенттарҙың, мәктәп һәм юғары уҡыу йорттары уҡытыусыларының, әҙәбиәт белгестәренең, ғөмүмән, һүҙ сәнғәте менән ҡыҙыҡһыныусыларҙың өҫтәл китабына әүерелә. «Әҙәбиәт теорияһы» тигән фундаменталь китаптың республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы менән билдәләнеүе һәм ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә өс тапҡыр баҫылып сығыуы үҙе үк күп нәмә хаҡында һөйләй.

XX быуаттың 70-се йылдарында К.Әхмәтйәнов төп иғтибарын башҡорт шиғриәтенең теоретик нигеҙҙәрен, тарихи поэтикаһын ентекләп, эҙмә-эҙлекле өйрәнеүгә йүнәлтә. Шул процеста ул поэзия үҫешенә тос өлөш индергән ҡайһы бер ижадсылар хаҡында монографиялар яҙырға ла өлгөрә. Был йәһәттән уның «Н.Нәжми — шиғыр оҫтаһы» (1974) тигән хеҙмәте айырыуса ҡыҙыҡлы. Унда ғалим халыҡ шағирының поэтик оҫталығын, донъяны күрә һәм образлы күрһәтә белеү маһирлығын асып биреүҙе маҡсат итеп ҡуйған.

К.Әхмәтйәновтың айырым бер әҙиптең ижад лабораторияһын өйрәнеүгә бағышлаған икенсе бер хеҙмәте лә ғилми йәмәғәтселек тарафынан ыңғай ҡабул ителде. Үҙенең «Ғ.Сәләм. Тормошо һәм ижады» (1980) тигән китабында ғалим «һәр бер иртәне йырға ҡушып йырлау», халҡына шиғриәттең шифалы нурҙарын күберәк сәсеп ҡалыу өсөн ашығып, янып-ярһып ижад иткән, шуға ла күп кенә мәҡәләләрҙә һәм иҫтәлектәрҙә ҡараңғы төндә күк йөҙөн тирә-йүнгә яҡтылыҡ сәсеп, бер мәлгә һыҙып үтеүсе метеор менән сағыштырылған шағирҙың ун йылға ғына һуҙылған ижад донъяһына киң һәм ентекле байҡау яһай. Ул яңы социалистик йәмғиәт төҙөү идеялары шаулатып алға һөрөлгән, уларҙы практик рәүештә тормошҡа ашырыу өсөн фиҙакәр көрәш барған XX быуаттың 30-сы йылдарында Ғ.Сәләмдең «Йыр, йыр кәрәк!» тип, саң ҡағып, яңы поэтик формалар, һүрәтләү алымдары һәм геройҙар эҙләп, яңы темалар күтәреп килеп инеүен һәм тиҙ арала ҡәләмдәштәренең лиде-

рына, башҡорт шиғриәтенең шоңҡарына әүерелеп китеүе серҙәрен бөтә нескәлегендә асып бирә. Ғалимдың был хеҙмәтен уҡығас, ижады бөгөн тарихилыҡ принцибын иҫтәренән сығарып ебәргеләгән ҡайһы бер тикшеренеүселәр тарафынан нисек кенә баһаланмаһын һәм нарыҡланмаһын, ул Ғ.Сәләмдең барыбер үҙ заманының үҫеш диалектикаһын күп кенә ҡәләмдәштәренә ҡарағанда тәрәнерәк төшөнә. Әҫәрҙәрендә 30-сы йылдар героикаһын, ижтимағи-сәйәси һәм иҡтисади тормошта ғына түгел, бәлки кешеләрҙең донъяға ҡараштарында, психологияһында ла ҙур үҙгәрештәр барыуын күрһәтә белгән, халыҡтың оптимистик рухын юғары художестволы кимәлдә сағылдырған, поэзиябыҙҙы идея-тематик яҡтан ғына түгел, ә жанр, стиль, форма йәһәтенән дә байыта алған ҙур шағир булғанлығына йәнә бер инанаһың.

Бына ошо рәүешле күренекле шағирҙарыбыҙҙың ижад емештәре менән уҡыусы күңелен арбау, әсир итеү серҙәрен асыҡлау, уларға эстетик баһа биреү өҫтөндә күп эшләй К.Әхмәтйәнов. Үрҙә телгә алынған «Шиғриәт иленә сәйәхәт» тигән китабында, Мәскәүҙә урыҫ телендә баҫылған «Башҡорт совет әҙәбиәте тарихы» исемле коллектив хеҙмәттең айырым бүлектәрендә, ваҡытлы матбуғат биттәрендә донъя күргән ҙур-ҙур мәҡәләләрендә Ш.Бабич, С.Ҡудаш, Ғ.Сәләм, Р.Ниғмәти, М.Кәрим һәм башҡа шағирҙарҙың ижади оҫталыҡтары серҙәрен өйрәнеүҙе үҙәккә ҡуя.

Ағымдағы әҙәби процеста, айырым шағирҙарҙың ижад емештәренә баһа биргән тәнҡит мәҡәләләрендә лә К.Әхмәтйәнов төп иғтибарын әҙәби оҫталыҡ мәсьәләләренә йүнәлтә. «Тәнҡитсе — шиғриәт һаҡсыһы» тип исемләй ул бер мәҡәләһен. Көндәлек тәнҡит мәҡәләләрен ул әллә ни күп яҙмай, ләкин уның һәр сығышы үҙе бер күренеш булараҡ ҡабул ителә, сөнки уларҙа ғалим үҙен һүҙ сәнғәтенең һаҡсыһы, уның юғары художество кимәле өсөн көрәшсе итеп тоя.

Ҙур фәнни тәжрибә туплаған ғалим, артабан тәнҡит мәҡәләләрендәге, әҙәбиәт тарихы буйынса яҙған хеҙмәттәрендәге, айырым шағирҙарға арналған монографияларындағы практик анализды саф теория менән тағы ла төплөрәк һәм тығыҙыраҡ бәйләргә тырыша. Шул ерлектә уның поэзияның үҫеш ҡанундарын төрлө яҡлап асып биргән «Поэтик образлылыҡ» (1979) тигән монографияһы донъя күрә. Тәрән, ентекле анализға, ҙур теоретик дөйөмләштереүҙәргә бай был хеҙмәт К.Әхмәтйәновтың әҙәбиәт ғилеме өлкәһендә донъя кимәлендә барған күҙәтеүҙәр, асыштар һәм дискуссиялар юғарылығында фекер йөрөткән, тикшеренеүҙәре менән дөйөм ғилми-әҙәби процеста ҡушылып киткән ҙур ғалим булыуын раҫлай. Быға үҙе тере сағында тулыһынса әҙерләп өлгөрә алмауы сәбәпле тормош иптәше Р.Әхмәтйәнова менән ҡәләмдәше С.Сафуанов хәстәрләп сығарткан «Матурлыҡ. Батырлыҡ. Шиғриәт» (1982) тигән әҙәби тәнҡит һәм әҙәбиәт ғилеме методологияһы өлкәһенә ҡараған мәҡәләләр йыйынтығы ла сағыу дәлил. Был китабында ла ғалим «һүҙ сәнғәте үҫешенә, айырым әҫәрҙәрҙе анализлауға теоретик ҡараш маһирлығын, художество оҫталығы мәсьәләләрен үҙәккә ҡуйыуын һәм ана шул оҫталыҡтың иң нескә быуындарына тиклем үтеп инеүҙе философик дөйөмләштереү менән бәйләү көсөнә» (*С.Сафуанов*) эйә бу-

лыуын күрһәтте. Тап ошо һыҙаттары уның бөтә ижад юлының төп үҙенсәлеген тәшкил итте.

К.Әхмәтйәновтың ғилми-әҙәби эшмәкәрлеген барлағанда йәнә бер нәмәне әйтеп үтмәү мөмкин түгел. Башҡорт шиғриәтенең бай фактик материалдары менән эш иткән, уларҙы юғары идея-эстетик талаптар кимәленән күңел зиһене иләге аша үткәргән һәм етди фәнни дөйөмләштереүҙәр яһаған ғалим Ә.Харисов, Ғ.Хөсәйенов кеүек күренекле әҙәбиәт белгестәре менән берлектә һүҙ сәнғәтебеҙ тарихында беренсе тапҡыр иң сағыу шиғри әҫәрҙәр тупланмаһын — «Башҡорт поэзияһы антологияһы»н төҙөп донъяға сығарыу идеяһын тормошҡа ашырыуға ла үҙенең тос өлөшөн индерә.

Ким Әбүзәр улы Әхмәтйәнов әҙәбиәт ғилемендә һәм тәнҡиттә йәштәрҙең кәңәшсеһе һәм остазы ла булды. Был уның ғилем һәм әҙәби ижад донъяһында тәүге аҙымдарын яһаусыларға айырыуса иғтибарлы булыуында ла асыҡ күренде. Ситкә китеп тормаҫтан, үҙемдең фәнни эшмәкәрлегем менән бәйле бер генә сәхифәне телгә алып үткем килә. Кандидатлыҡ диссертациямдың авторефератын ҡаратып, тикшертеп алыу өсөн әҙерләнеп йөрөгән көндәрҙә Ким Әбүзәр улы Ҡырымға ялға китеп барҙы. Автореферат ҡульяҙмаһының машинканан уҙғарылған данаһын уға тапшырырға өлгөрмәнем. Ғәжәп хәл: 2—3 көн үтеүгә, көтмәгәндә Ким ағайҙан тиҙ арала авторефератымдың ҡараламаһын ебәреүҙе һораған телеграмма килеп төштө. Ике аҙна үтеүгә, мин почтала уның кәңәштәре, тәҡдим-төҙәтмәләре теркәлгән ҡульяҙмаһын тотоп тора инем. Ә бит 3—4 көндән ғалим үҙе лә ҡайтып төштө. Йылдар үткән һайын Ким Әхмәтйәнов кеүек ғалимдарҙың ғилми уҙаманлыҡтары, эштәре һүҙҙәренән айырылмаған ир-егетлектәре күңелдә яҡты бер эҙ ҡалдырыусы хәтирә булып ҡабат-ҡабат иҫкә төшә.

Халҡыбыҙ борон-борондан үҙенең батырҙарын, ил уҙамандарын, арҙаҡлы шәхестәрен хөрмәт иткән. К.Әхмәтйәновтың яҙмышына ла шундай өлөш төшкән. Бөгөнгө көндә Әбйәлил районында ошондай арҙаҡлы шәхестәребеҙҙең береһе, күренекле ғалим-яҙыусы, тәнҡитсе һәм педагог Ким Әбүзәр улы Әхмәтйәнов исемендәге махсус премия булдырылған. Тәүге премия башҡорт халҡының арҙаҡлы шәхесе, күренекле яҙыусы Рамазан Ғимран улы Өмөтбаевҡа бирелде. Әбйәлил яҡтарында булғанда, үҙ күҙҙәрем менән күреп, шатланырға яҙҙы: Әлмөхәмәт ауылының матур бер урамы Ким Әхмәтйәнов исемен йөрөтә, ул йәшәгән йортҡа, уҡыған мәктәпкә мәрмәр таҡташ ҡуйылған. Мәктәп етәкселеге, уҡытыусылар, балалар, ауыл халҡы ярҙамы менән мәктәп музейына ғалим хаҡында иҫтәлекле материалдар, әҙәби ҡомартҡылар тупланған. Был изге эшкә уның тормош юлдашы Рәйфә ханым күп көс һалған.

Эйе, Ким Әбүзәр улы Әхмәтйәнов оло йөрәкле шәхес, ҙур ғалим ине. Беҙгә ул ысын мәғәнәһендә ғилми гәүһәрҙәр ҡалдырҙы. Тәрән эстәлекле был хеҙмәттәр уның ҙур маҡсаттар, уй-ниәттәр, киң ҡоласлы теоретик проблемалар менән йәшәгәнлеген, юғары кешелек сифаттарына эйә булғанлығын бер туҡтауһыҙ хәтерләтеп тора. Киләсәктә олуғ шәхестең ошо изге эшен дауам иттереүсе, байытыусы һәм яңы баҫҡысҡа күтәреүсе әҙәбиәт белгестәренең үҫеп сығасағына өмөт итәйек. Шулай була күрһен. Бының өсөн беҙҙә хәҙер бөтә шарттар ҙа бар.